# БЕРГӘЛӘП КЕНӘ ЛАЙЫҠЛЫ КИЛӘСӘККӘ ӨЛГӘШӘСӘКБЕҘ

*Башҡортостан Республикаһы Президенты М.Ғ.Рәхимовтың Башҡортостан халыҡтары ассамблеяһындағы сығышы*

Хөрмәтле съезд делегаттары һәм ҡунаҡтары!

Ҡәҙерле дуҫтар!

Бөгөн республиканың ижтимағи тормошонда иҫтәлекле көн. Тарихыбыҙҙа тәүге тапҡыр барлыҡ ҡала һәм районларҙың илселәре — төрлө милләт вәкилдәре тыуған Башҡортостаныбыҙҙың яңырыу, милләттәр һәм милләт-ара мөнәсәбәттәрҙең үҫеше проблемаларын тикшереү өсөн дөйөм форумға йыйылды.

Һеҙҙе ошо оло, ысын мәғәнәһендә хәл иткес ваҡиға менән ихлас ҡотларға, съезд делегаттарына һәм унда ҡатнашыусыларға ныҡлы һаулыҡ, эш кәйефе, Башҡортостаныбыҙҙың һәм уның барлыҡ халыҡтарының сәскә атыуы хаҡына ижади уңыштар теләргә рөхсәт итегеҙ.

Хөрмәтле иптәштәр!

Замандың ябай булмаған талаптарына һығылмалы мөнәсәбәттә булған ижтимағи ҡоролоштоң һөҙөмтәле моделен булдырыу бөгөнгө көндөң өҫтөнлөклө бурыстарының береһе булып тора. Шуға күрә федераль, шулай уҡ төбәк кимәлендә милли сәйәсәтте тормошҡа ашырыу концепцияһын һәм тәьҫирле алымдарын эшләү көнүҙәк мәсьәлә булып тора. Үҙ-ара эш итеүҙең тотороҡло формалары, бөтә яҡлап һәм асыҡтан-асыҡ тикшереү булмай тороп, милләт-ара мөнәсәбәттәр өлкәһендәге мәсьәләләрҙе хәл итеү мөмкин түгел. Бөгөн һеҙ ҡатнашҡан Башҡортостан халыҡтары конгресын үткәреү буйынса инициативабыҙ нәҡ ошоно маҡсат итеп ҡуйҙы.

Был форумдың әһәмиәте республика менән генә сикләнеп ҡалмай, шуға күрә Рәсәйҙең сәйәси һәм фәнни йәмәғәтселеге яғынан булған ҡыҙыҡһыныу ҙа юҡҡа ғына түгелдер. Беҙ Рәсәй Федерацияһы Дәүләт Думаһы депутаттарын Федерация эштәре, милли һәм миграция сәйәсәте министрлығының етәксе хеҙмәткәрҙәрен, Волга буйы федераль округы, илебеҙҙең башҡа төбәктәре вәкилдәрен ҡәҙерле ҡунаҡтар сифатында күреүебеҙгә шатбыҙ.

Был съезға ҙур әһәмиәт бирәбеҙ. Был уның милләт-ара мөнәсәбәттәрҙе артабан камиллаштырыуҙа төп этап булып тороуына ғына ла бәйле түгел. Хәтерегеҙҙәлер, һуңғы бер нисә йыл эсендә ошо ҙур эш сиктәрендә дәүләт ярҙамы менән Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы, Башҡортостан урыҫтары соборы, татарҙар съезы, сыуаштар канашы, шулай уҡ мари, мордва, удмурт, украин, йәһүд һәм республиканың башҡа халыҡтары съездары булды.

Был съездарҙа һәр милләттең артабанғы үҫеше, халыҡтарыбыҙҙың берҙәм ғаиләһендә уларҙың роле мәсьәләләре күтәрелде. Милли форумдар делегаттары программа характерындағы документтар ҡабул итерлек Башҡортостан халыҡтары конгресын үткәреү теләген белдерҙе.

Һис шикһеҙ, был форум ижтимағи тормошобоҙҙа һиҙелерлек ваҡиғаға әүерелергә тейеш. Ул беҙҙең барыбыҙҙы — дәүләт органдарын һәм йәмәғәт берекмәләрен — милләт-ара мөнәсәбәттәрҙе төҙөүҙең сифаты яғынан яңы кимәлгә, гражданлыҡ тыныслығы һәм татыулығының яңы формалары һәм стандарттарына сығарыуы менән мөһим.

Съезд алдынан ойоштороу комитеты ҡала һәм район хакимиәттәре, йәмәғәт һәм милли-мәҙәни берекмәләр, киң информация саралары һәм интеллигенция вәкилдәре менән берлектә ҙур эш башҡарҙы. Ҡала һәм район конференцияларында ассамблеяға йәмәғәт наказы булараҡ яңғыраған тәҡдимдәр әйтелде. Милләт-ара татыулыҡты, телдәрҙе үҙ-ара байытыу традицияларын һәм милли мәҙәниәттәрҙе артабан нығытыуға булышлыҡ иткән ҡарарҙарҙы берлектә эшләү зарурлығы уларҙың асылын тәшкил итә. Халыҡтарҙың дуҫлығын һәм тығыҙ хеҙмәттәшлеген һаҡлап ҡалып һәм нығытып ҡына беҙ бергә Башҡортостандың демократия һәм прогресс юлынан артабан да ынтылышлы алға барыуын тәьмин итә аласаҡбыҙ.

Хөрмәтле съезд делегаттары һәм ҡунаҡтары!

Яҙмыш шулай хәл иткән: бына бер нисә быуат инде беҙҙең төбәктә йөҙҙән ашыу милләт кешеһе иңгә-иң терәп йәшәй. Тарих һәм тормош уларҙы яҡынайтты, берләштерҙе. Бөгөн Башҡортостан — күп милләтлелеге һәм үҙенсәлекле мәҙәниәттәрҙең, телдәрҙең һәм традицияларҙың күп төҫлөлөгө буйынса уникаль төбәк. Образлы әйткәндә, ул һәр сәскәһе, һәр тажы үҙенсә матур һәм ҡабатланмаҫ булған ҙур гөлләмәгә оҡшаш.

Беҙ күп милләтлелек — проблема түгел, ә республикабыҙҙың баһалап бөткөһөҙ байлығы булыуына тағы ла бер тапҡыр иманабыҙ. Халыҡтарыбыҙ һәр саҡ дуҫлыҡта һәм татыулыҡта йәшәгән, шуға күрә төрлө милләт кешеләренең берҙәмлеге кеүек баһалап бөткөһөҙ ҡаҙаныштарға һаҡсыл мөнәсәбәт, уларҙың төрлө мәҙәни һәм рухи тормошона бөтә яҡлап ярҙам күрһәтеү дәүләт органдарының төп бурыстары булды һәм булып ҡала.

Беҙ демократия шарттарында, бөтә милләттәрҙе һәм халыҡтарҙы ихлас хөрмәт итеп, уларҙың мәҙәни-рухи ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереү өсөн шарттар тыуҙырып, беҙҙең үҙенсәлектәребеҙ бәхәстәргә сәбәпсе булмай, берлектәге күп төрлө һәм бай тормошобоҙҙоң ҡәҙерле һәм ҡиммәтле күренешенә әүерелһен өсөн милләт-ара мөнәсәбәттәрҙе уйлап һәм яуаплы көйләргә мөмкин икәнлегенә ныҡлы ышанабыҙ.

Ҡәҙерле дуҫтар!

Бөгөн ошо вәкиллекле милләт-ара форумда, Башҡортостан халыҡтарының туғандарса бергә йәшәүе, уларҙың хеҙмәттәшлеге һәм дуҫлығы сығанағы, тамырҙары нимәлә, тигән һорау өҫтөндә уйланырға кәрәк.

Улар биш быуат ашыу дауамында барлыҡҡа килгән мөнәсәбәттәрҙең төп принциптары менән бәйләнгән тип күҙалланыла. Улар — үҙ-ара ихтирам һәм татыулыҡ.

Берлектәге тормошобоҙ законына әүерелгән был принциптар иң ҡырыҫ осорҙа, ауыр һынауҙарҙа ныҡлыҡҡа һынау үткән һәм ижтимағи тотороҡлолоҡ, һөҙөмтәле берлектәге хеҙмәт, тыуған еребеҙҙе төҙөкләндереүҙең ышаныслы нигеҙе булып тора.

Нәҡ улар юғары ҡиммәттәр булды, кешеләрҙең аңына һәм хис-тойғоларына үтеп инде, көн һайын уларҙың аралашыуын һәм эшмәкәрлеген көйләй. Ошо рухи нормаларҙы һәм идеалдарҙы беҙ тарихыбыҙҙың иң ҡатмарлы осорҙарында ла милли һәм дини ыҙғыштар булмаған Башҡортостанда милләт-ара һәм конфессия-ара мөнәсәбәттәрҙең үҫеш үҙенсәлектәрен аңлау асҡысы тип күрәбеҙ.

Был Башҡортостандың һәм уның халыҡтарының оло тыуған илебеҙ — Рәсәйгә мөнәсәбәтәрен аңлау асҡысы ла булып тора. Тарих шуны раҫлай: үҙ хоҡуҡтарын, азатлыҡтарын һәм принциптарын яҡлап, айырым хакимдарға һәм чиновниктарға ҡаршы сығыш яһап, Башҡортостан халҡы һәр саҡ Рәсәй дәүләтенең ышаныслы терәге булды.

Был принциптар республикабыҙҙың барлыҡ ижтимағи тормошоноң нигеҙе булып тора. Уның ыңғай роле милли үҙаң үҫкән саҡта ил тормошон яңыртыу һәм демократия йылдарында айырыуса һиҙелерлек сағылды. Тап бына ихтирам итеүгә һәм татыулыҡҡа баҫым яһау беҙгә милли энергияны ижад итеүгә йүнәлтергә ярҙам итте. Был республикаға ҡатмарлы һәм ҡаршылыҡлы осорҙа Рәсәй составында суверенлы демократик дәүләт төҙөүгә дөрөҫ йүнәлеш алырға, Федераль үҙәк менән хоҡуҡи, иҡтисади һәм мәҙәни мөнәсәбәттәр системаһын төҙөргә мөмкинлек бирҙе.

Был йылдарҙа беҙ дәүләттең абруйын нығытып, граждандарҙың хоҡуҡтарын

һәм азатлыҡтарын һаҡлауға өлгәштек, ижтимағи үҙгәртеп ҡороуҙарҙы эҙмә-эҙлекле тормошҡа ашырыу юлынан барыуыбыҙҙы дауам итеп, халыҡтың төрлө төркөмдәре эшмәкәрлеген һәм мәнфәғәттәрен яраштырыуға өлгәшә алдыҡ. Башҡортостандың реаль дәүләтселеге элекке ҡиммәттәр һәм нормаларҙың емерелеүе шарттарында йәмғиәтебеҙҙе рухһыҙлыҡтан, халыҡ традицияларын һәм кешеләр тормошоноң әхләҡи нигеҙҙәрен һаҡлап ҡалыуға булышлыҡ итте. Нәҡ шуға күрә айырым ижтимағи проблемаларҙың киҫкенлеге Башҡортостан халыҡтары вәкилдәре тарафынан милли дискриминация сағылышы булараҡ ҡабул ителмәне һәм милләт-ара ерлектә үс алыуға сәбәпсе булманы.

Республикала тотороҡлолоҡто һаҡлап ҡалыу Башҡортостан дәүләтселеген нығытыу — сепаратистик тенденцияларҙың сағылышы түгел, ә Рәсәй Федерацияһының тотороҡлолоғон һаҡлап ҡалырға һәләтле һыналған стратегия булыуын ышаныслы күрһәтте. Беҙҙең инаныуҙар үҙгәрешһеҙ ҡала: көслө төбәктәр — көслө Рәсәй. Күп милләтле демократик Башҡортостан төҙөү — яңыртылған Рәсәй Федерацияһы төҙөүгә индергән беҙҙең төп өлөшөбөҙ.

Хөрмәтле иптәштәр!

Милли сәйәсәттең төп өҫтөнлөктәрен билдәләп, беҙ дәүләт беренсе этапта теге йәки был халыҡтың мәҙәниәтен, традицияларын һаҡлау һәм үҫтереү менән шөғөлләнгән ижтимағи институттар ойоштороуҙа ярҙам күрһәтергә тейешлегенә нигеҙләндек. Дәүләт структуралары һәм милли интеллигенция өҫтөнлөктө тәшкил иткән милли активтың берлектәге быңдай инициативаһы йәмғиәттә ыңғай резонанс тыуҙырҙы һәм күп милли съездар үткәреү өсөн нигеҙ булды.

Был процестарҙы хуплап, беҙ яңынан барлыҡҡа килгән ойошмалар граждандлыҡ йәмғиәтенең мөһим элементтарына әүерелеүенә иҫәп тоттоҡ. Беҙҙең өмөттәр күп яҡлап аҡланды. Республикала ҡырҡтан ашыу милли-мәҙәни йәмғәт берләшмәһе теркәлде һәм эш итә. Улар халыҡ араһында тейешле эш башҡара, төп проблемаларҙы эҙләп таба һәм дәүләт ярҙамы менән милли һәм милләт-ара мөнәсәбәттәр өлкәһендәге теге йәки был мәсьәләләрҙе хәл итергә тырыша.

Шул уҡ ваҡытта, асыҡтан-асыҡ әйткәндә, беҙ милли-мәҙәни берекмәләр һәм үҙәктәр үҙҙәренең мөмкинлектәрен киңерәк файҙаланырға тырышыр һәм дәүләт органдарына хас булмаған тормош өлкәләрендә эштәрен йәйелдерер, тип өмөтләндек. Туған телдәр уҡытылған кластарға уҡыусылар йыйыу, республика халыҡтары телдәрендәге гәзит-журналдарға яҙылыу кампаниялары, халыҡ ижады һәм башҡа мәсьәләләр нәҡ йәмғәтселек иғтибары үҙәгендә булырға тейеш тип исәпләйем.

Әлбиттә, беҙ уларҙың ҙур ижтимағи әһәмиәткә эйә булған эшмәкәрлегенә ярҙам итәсәкбеҙ. Шул уҡ ваҡытта теге йәки был саралар үткәргәндә дәүләт ярҙамына ғына иҫәп тоторға ярамағанлығын да онотмаҫҡа кәрәк.

Ҡәҙерле дуҫтар!

Беҙҙә иҡтисадты артабан үҫтереүгә, халыҡтың тормош кимәлен күтәреүгә бөтә тәүшарттар ҙа бар.

Һеҙ беләһегеҙ, 1994 йылда договор нигеҙендә федераль һәм республика власть органдары компетенцияһын аныҡ айырып, Башҡортостан бюджетты үҙ аллы формалаштырыу һәм тотоноу, финанслау һәм кредитлау өҫтөнлөктәрен билдәләү, күп милләтле халҡыбыҙҙың мәнфәғәттәренә тап килгән социаль-иҡтисади үҫеште тормошҡа ашырыу мөмкинлеге алды.

Минималь тормош именлеген һәм гарантияларын тәьмин итеүҙең совет системаһы емерелгәс дәүләтебеҙ республика халҡын социаль яҡлау тураһындағы хәстәрлек күреүҙе ҡәтғи рәүештә үҙ ҡулына алды.

Беҙ бюджеттан бүленгән средстволарҙың яртыһынан күберәген аңлы рәүештә социаль сығымдарға йүнәлттек. Ошоноң менән беҙ пенсионерҙарға, инвалидтарға, күп балалы ғаиләләргә һәм халыҡтың социаль яҡтан аҙ тәьмин ителгән ҡатламдарына льготалар тәьмин итә алдыҡ.

Ауыр шарттарҙа һаулыҡ һаҡлауҙы, фәнде, мәҙәниәтте һәм сәнғәтте тотороҡло үҫтереү өсөн средстволар табылды.

Ҡырҡыу мәсьәләләрҙе комплекслы һәм системалы хәл итеү халыҡты социаль тәьмин итеү һәм социаль яҡлау мәсьәләләрендә тарихи артта ҡалыуҙар-

ҙы еңеп сығып, республикаға был күрһәткестәр буйынса Рәсәйҙә әйҙәүсе позицияларға сығыу мөмкинлеген бирҙе.

Беҙ айырым маҡсатлы республика торлаҡ программаларын әүҙем тормошҡа ашырабыҙ, бының өсөн махсус торлаҡ төҙөлөшө фонды ойошторолдо. Һөҙөмтәлә һуңғы йылдарҙа Башҡортостан Рәсәйҙә файҙаланыуға индерелгән торлаҡ күләмдәре буйынса әйҙәүсе урынды тотороҡло биләй. Йыл һайын уртаса алғанда 1,5 миллион квадрат метр торлаҡ майҙаны файҙаланыуға индерелә. Һуңғы ун йыл эсендә 200 меңдән ашыу ғаилә — республика халҡының яҡынса биштән бер өлөшө яңы фатирҙарға күсте.

Газ үткәреү, айырыуса ауыл ерендә, тормош шарттарын яҡшыртыуҙың мөһим факторына әүерелде. Ун йыл эсендә газ үткәреү күләме 4,2 тапҡырға артты. Ошо осор эсендә 16 мең километрҙан ашыу газ селтәре файҙаланыуға индерелде. Халҡыбыҙҙы телефон бәйләнеше средстволары менән тәьмин итеү 1,7 тапҡырға, еңел автомашиналар һаны ике тапҡырға артты.

Шулай итеп, үҙгәртеп ҡороу йылдарында республикала халҡыбыҙ өсөн яңы «социаль стандарт» барлыҡҡа килде. Хәҙер беҙ, ҡайһы саҡта үҙебеҙ ҙә һиҙмәҫтән, ошонан иҫәп алып барабыҙ.

Мәҙәни-рухи өлкәлә лә тәрән үҙгәрештәр бара. Барлыҡ ҡыйынлыҡтарға ҡарамаҫтан, Башҡортостанда яңы мәктәптәр, театрҙар һәм гәзиттәр, күргәҙмәләр һәм мәҙәни үҙәктәр асыла, халыҡ фестивалдәре һәм байрамдары үтә.

Беҙҙең мәғариф системаһы республикала йәшәгән халыҡтарҙың милли һәм рухи үҙенсәлеген иҫәпкә алыу мөмкинлеген бирә. Әгәр 1990 йылда уҡытыу ете телдә булһа, бөгөн ун дүрт телдә алып барыла. Балалар төрлө формаларҙа туған телен өйрәнгән мәктәптәр һаны ун йыл эсендә ике тапҡырға артты.

Туған телгә өйрәнеүгә ҡәтғи боролош беҙҙе, һис шикһеҙ, ҡыуандыра. Әммә бында һөҙөмтәләр яҡшыраҡ та була алыр ине. Төп сәбәп — ҡайһы бер ата-әсәләрҙең туған телдә сифатлы белем алып булмай тигән яңылыш фекере. Туған тел предмет булараҡ индерелһә, күпселек ата-әсәләр быны өҫтәмә йөк тип ҡабул итә. Бында ғаиләнең, мәктәптең, йәмәғәтселектең, урындағы башҡарма власть органдарының берлектә көс һалыуы кәрәк.

Ижтимағи тормошто демократлаштырыу милли матбуғаттың үҫеше өсөн шарттар тыуҙырҙы. Гәзит-журналдар беҙҙә ете телдә сығарыла. Әгәр ете йыл элек республика радиоһы тәүлегенә ни бары 3,5 сәғәт эшләһә, бөгөн төрлө телдәрҙә дөйөм күләме йөҙ сәғәт самаһы булған тапшырыуҙар үткәрелә; 1990 йылда бер киностудия эшләһә, бөгөн улар тиҫтәләрсә. Республикала яңы телерадиотапшырыуҙар каналы ойоштороу тураһында ҡарар ҡабул ителде.

Яҡшы фәнни базаны мин милли сәйәсәттең мөһим ҡаҙаныштарының береһе тип иҫәпләйем. Үҙ аллы республика статусы барлыҡҡа килеүҙең беренсе көндәренән үк беҙ Рәсәйҙә тәүгеләрҙән булып был мәсьәләләрҙе тикшереүгә әйҙәүсе ғалимдарҙы, йәмәғәтселек вәкилдәрен йәлеп итеп комплекслы ҡараштa булдыҡ. Шуға күрә 90-сы йылдар башында уҡ халыҡтарыбыҙҙың милли-мәҙәни ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереүҙең тәүге дәүләт программалары барлыҡҡа килде. Әлеге ваҡытта эшләнеп ятҡан «Башҡортостан халыҡтары» дәүләт программаһы уларҙың дауамына һәм үҫешенә әүерелергә тейеш.

Йәмәғәтселегебеҙ иғтибары үҙәгендә булырға тейешле тағы ла бер мәсьәлә. Был — яҡшы булмаған демографик хәл. Рәсәй масштабында ул милли һәләкәт характерына эйә. Тормош шарттарын яҡшыртып, матди уңайлыҡтар тыуҙырып ҡына уны хәл итеү мөмкин түгел. Ғаиләнең, кешенең төп байлығы әйбер түгел, ә бала тигән яңы ҡиммәтле ориентирҙар, тормош ҡанундары булдырырға кәрәк. Ғаиләлә күп балалыҡ һәр саҡ халыҡтарыбыҙҙың милли традицияларының береһе булыуын хәтергә төшөрөргә кәрәк.

Хөрмәтле иптәштәр!

Рәсәй бөгөн ике юл сатында тора. Рәсәй дәүләтселеген нығытыуҙы илде артабан яңыртыуҙың төп йүнәлештәренең береһе итеп ҡарарға мөмкин. Рәсәй етәкселеге үткәргән башҡарыу вертикален нығытыу — бөтә Федерация масштабында иҡтисади һәм социаль-сәйәси процестарға идара итеүҙе тәьмин итергә тейешле мөһим сара, унһыҙ йәмғиәтте рефор-

малау уңышлы дауам итә алмаясаҡ. Шуны аңлап, Үҙәк үткәргән сәйәсәтте әүҙем яҡларға һәм ярҙам итергә әҙербеҙ.

Ләкин власть вертикален нығытыу — үҙмаҡсат түгел. Шуға күрә был проблеманы «бөтә саралар ҙа яҡшы» тигән принцип менән хәл итергә, ғәмәлдәге конституцион-хоҡуҡи майҙан сиктәренән сығырға, Рәсәй федерализмы нигеҙҙәрен һәм демократик нормаларҙы боҙорға ярамай. Уны тормошҡа ашырғанда айыҡ аҡылға һәм әле булған сәйәси ысынбарлыҡҡа таянырға, бөтә төбәктәрҙең һәм Рәсәй халыҡтарының законлы мәнфәғәттәрен иҫәпкә алырға кәрәк.

Минең ҡарашҡа, милли үҫештең билдәле бер мәсьәләләрен Ассамблея федераль органдар алдына ла ҡуя алыр ине. Рәсәй халыҡтары мәнфәғәттәренә закондар сығарыу һәм башҡарма власть органдарында тиң вәкәләттәр бирелмәүе менән борсолоуыбыҙҙы аңларға тейештәр. Милли мәҙәниәттәрҙе үҫтереү өсөн федераль средстволар етерлек бүленмәй, бөтә Рәсәй телевидение һәм радиоһында Рәсәй халыҡтары тормошон яҡтыртыусы махсус каналдар әле булһа юҡ. Әгәр ҙә республикаларҙың үҙҙәрендә был мәсьәләләр ниндәйҙер дәрәжәлә хәл ителә икән, уларҙан ситтә этник берләшмәләр күп нәмәнән мәхрүм. Был осраҡта Рәсәйҙең Федерация эштәре, милли һәм миграция сәйәсәте буйынса министрлығы был мәсьәләләрҙә һәр ваҡытта ла принципиаль позицияла тормай.

Үҙәктә элеккесә Рәсәйҙе «губерналаштырыу» тураһындағы конструктив булмаған идеялар әленән-әле сығып тора, федераль округтар барлыҡҡа килтереү, йәнәһе, Федерация субъекттарын юҡҡа сығарасаҡ, тигән хәбәрҙәр таратыла.

Миңә ҡалһа, Рәсәй Президентының федераль округтарҙағы вәкилдәре эшмәкәрлеге административ-команда идара итеүе моделен аяҡҡа баҫтырырға маташыуға ҡарап түгел, ә кешеләрҙең тормош кимәле нисек күтәрелеүгә, милли проблемалар нисек хәл ителеүгә ҡарап баһаланырға тейеш. Шул осраҡта ғына федераль власть вертикален нығытыу федераль мөнәсәбәттәрҙе ысынлап яҡшыртасаҡ тиеүҙәре менән тулыһынса килешәм.

Һуңғы ваҡиғалар Башҡортостандың федераль власть менән һөҙөмтәле мөнәсәбәттәр ҡора алыуын ышандырырлыҡ күрһәтте. Республика Рәсәй Федерацияһының закондарҙы яраштырыу буйынса башланғыс менән сығыш яһаусы беренсе субъекты булды. Билдәләп үтәм, был тәрән уйланылған аҙым булды. Беҙ, иҡтисади интеграцияның иң төп факторҙарының береһе булған дөйөм хоҡуҡи майҙанды формалаштырыу объектив яҡтан өлгәреп еткән һәм тиҙерәк тормошҡа ашырыуҙы талап итә, тигән фекерҙән сығып эш иттек.

Республиканың Төп Законына ике йөҙгә яҡын төҙәтмә индерелде. Конституцияның бөтә төп бүлектәренә төҙәтмәләр индерелде, уның структураһы ҡайтанан ҡаралды. Беҙҙең закон сығарыусыларҙың яраштырыу барышында ижтимағи тормошта булып үткән бөтә үҙгәрештәрҙе иғтибар менән иҫәпкә алыуы, беҙҙең Конституцияла һалынған камиллаштырыуҙың бай потенциалын, федераль мөнәсәбәттәрҙе үҫтереү практикаһы сиктәрендә барлыҡҡа килгән һәм Үҙәк менән беҙҙең республика араһындағы үҙ-ара компромистар нигеҙендә тыуған хоҡуҡи базаны иҫәпкә алыуы был эш һөҙөмтәләрендәге принципиаль күрһәткес булып тора.

Хөрмәтле делегаттар!

Беҙҙең бурыстар ҙур, уларҙы тормошҡа ашырыу юлдары ауыр һәм яуаплы. Ләкин беҙ үҙгәрештәр юлы буйлап алға барыуҙы дауам итәбеҙ, сөнки был йүнәлештәге һәр аҙым, һалынған һәр тырышлыҡ, стандарт булмаған ҡарарҙарҙы ижади эҙләү төп бурысты — Рәсәй Федерацияһы составында йылдам үҫеүсе демократик Башҡортостандың тотороҡлолоғон тәьмин итеүгә ярҙам итә.

Сығышымдың аҙағында тағы ла бер тапҡыр съезға уңышлы һәм конструктив эшләү, ә бөтә делегаттарға һәм ҡунаҡтарға һаулыҡ, уңыштар һәм етеп килеүсе Яңы йылда бәхет теләйем. Беҙ үҙ ынтылыштарыбыҙҙа берҙәм, тыуған республикабыҙҙы үҙ граждандарының социаль яҡланғанлығы юғары дәрәжәлә булған, унда йәшәгән халыҡтары сағыу һәм үҙенсәлекле мәҙәниәткә эйә булған юғары үҫешкән төбәк итеп күрергә теләйбеҙ. Бергәләшеп билдәләнгән маҡсаттарға өлгәшә аласағыбыҙға ышанам.

Республика халыҡтарының күп милләтле берҙәмлеге нығыһын!

Еребеҙҙә һәр саҡ тыныслыҡ һәм үҙ-ара килешеп йәшәү тантана итһен!

Иғтибарығыҙ өсөн рәхмәт.